# ӘСӘ ТЕЛЕ 1



# Хәрефтәр, өн,



## ...ндәр илендә



СЫНБУЛАТОВА Ф. Ш.

# ӘСӘ ТЕЛЕ




**Башҡорт мәктәптәренең
1-се класы өсөн
вариатив дәреслек**

*Башҡортостан Республикаһы
Мәғариф министрлығы
тарафынан расланды*

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте
ӨФӨ · 2008

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
С 87

## Шартлы тамғалар

 — күсереп яҙ, тигәнде аңлата

● — өҫтәлмә эш

* — ҡатмарлы эш

**Сынбулатова Ф. Ш.**
С 87 Әсә теле: Башҡорт мәктәптәренең 1-се класы өсөн вариатив дәреслек. — Өфө: Китап, 2008. — 104 бит.

ISBN 978-5-295-04395-6

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—016/08**

**ISBN 978-5-295-04395-6**

© Сынбулатова Ф. Ш., 2008
© Мөхтәруллин А. Р. һүрәттәре, 2008

# Алфавит.

1. Булат менән Бикә һүрәт төшөргән. Улар уға «Алфавит иле» тип исем ҡушҡан. Балалар хәрефтәрҙе төркөмләп йорттарға урынлаштырған. Бикә менән Булат уларҙы ниндәй үҙенсәлектәре буйынса төркөмләгән?



● Һүрәт һәм «Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр» ярҙамында «Алфавит иле» исемле әкиәт төҙөгөҙ.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: йорт һалғандар, кәңәшләшкәндәр, оҡшаш өндәр, парлашып, бәхәс киткән, бергә йәшәргә, күңелле, татыу ғаилә, Алфавит урамы.

2. 

**Алфавит.**

Алфавитта 42 хәреф. Унда 27 тартынҡы хәреф бар. Һуҙынҡылар — 13.

Мин уҡырға өйрәндем. Матур итеп яҙа ла беләм.

3. Бирелгән хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.



**4.** Һүҙҙәрҙе уҡы, күсереп яҙ. Хәтереңдә ҡалдыр.

белем, уҡымышлы, ғалим, уҡыу, мәктәп, ғилем

**Мәҡәлдәр.**

Белеме барҙың ҡәҙере бар.

Белеме ҙурҙың телеме ҙур.

Беләге бар берҙе йығыр,
Белеме бар меңде йығыр.

- Был мәҡәлдәрҙе нисек аңлайһың? Миҫалдар килтереп һөйлә.

**5.** Бирелгән хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.

ә,б,с,ә,р; у,б,ҫ,ы,а; к,е,л,ә,н; м,л,ҫ,а,и; ғ,т,а,ы; ҡ,б,с,ы,ы; к,ҫ,ә,е; б,р,ү,е; с,р,и,к,е

**6.** Һәр рәттә артыҡ хәрефте билдәлә. Ни өсөн артыҡ булыуын аңлат.

1) а, ә, о, у, ы
2) н, р, ж, л, м, ң, й
3) д, ф, к, с, т, п, ҫ
4) ж-ш, з-с, г-к, ғ-ҡ, м-л
5) и, ү, ы, ә, ө, ә

**7.** Һүрәт буйынса телдән мажаралы бәләкәй хикәйә төҙө. Уға исем ҡуш. Түбәндәге схемаға

ярашлы 2 һөйләм яҙ. Һүрәттә күрһәтелгән 5—6 предметтың атамаһын алфавит тәртибендә яҙ.





**8.** Түбәндә бирелгән эштәрҙе башҡар.

1. Алфавиттың тәүге ун хәрефен тәртип буйынса яҙ.
2. Алфавиттан ике өндө белдергән хәрефтәрҙе күсереп яҙ.
3. Алфавиттан рус һүҙҙәрендә генә яҙылған өс хәрефте яҙ.
4. Алфавитта нисә хәреф? Яуап яҙ.

**11.** Тексты уҡы. Шыма уҡырға өйрән. Уның йөкмәткеһе буйынса фекер алышығыҙ.

## Тыңлауһыҙ ҡуян.

Ҡуян балаһы әсәһен тыңламаны. Бәләкәс йылға аша һикерҙе. Ул уның киңлеген күҙаллай алманы. Бигерәк бәләкәй ине шул ҡуянҡай. Артҡы аяҡтары менән боҙға һуғылды. Боҙ ярылып китте. Хайуанҡай йылғаға ауыша башланы. Ул алғы аяҡтары менән ярға йәбеште. Әсәй ҡуян секунд эсендә балаһы аша ярға ырғыны. Уны ҡолаҡтарынан тартып сығарҙы.

— Яҙғы боҙға яҫтыҡтай булһа ла ышанма, — тиҙәр. Ҡуян балаһы быны белмәй ине шул!

- Текстан предметты аңлатҡан 5—6 һүҙ күсереп яҙ. Тартынҡы хәрефтәрҙең аҫтына һыҙ.

**12.** Түбәндәге һүҙҙәр тураһында нимә әйтерһең? Уларға хас үҙенсәлектәрҙе тап. Ҡайһы төркөмдә орфограмма бар? Уны аңлат. Күсереп яҙ.

1) ейән, япраҡ, ҡаяу, сынаяҡ, юрған
2) күбә, сейәлек, бөгөн, һепертке, тәпәш
3) саған, бурыс, туғай, сыбыртҡы, упҡын
4) йылы, ҡыҙыл, тырыш, ҡыйыш

13. 

## Сафлыҡ.

Тирә-яҡта һиллек. Тын ғына ҡар яуа. Бөтә тирә-йүн ап-аҡ. Донъя яҡтырып киткән төҫлө. Һәр нәмәнән сафлыҡ бөркөлә. Тын алыуы рәхәт.

**14.** Кәрәкле һуҙынҡылар өҫтәп, предмет һәм уның билдәһен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр төҙөп яҙ.

Өлгө: **ҙ, н** — иҙән; **т,р,н** — торна һ. б.

ҙ,н; т,р,н; с,б,н; ш,л,ҡ,н; г,л;
й,л; й,м,л; ҡ,т; ҡ,ҫ,ҡ; д,р,ҫ;
б,р; к,л; ҡ,й; й,р,й; һ,ғ,ш.

**15.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәрҙең өн моделен иғтибар менән ҡара. Һәр һүҙҙе транскрипцияла күрһәт һәм хәрефтәр менән дөрөҫ итеп яҙып ҡуй.






16.

**Бесәй сыҡҡан һунарға.**

Бесәй сыҡҡан һунарға,
Гөлшат сыҡҡан уйнарға.

Гөлшат тубын һикертә,
Бесәй күҙен йүгертә.

(Миңлегөл Хисмәтуллина.)

**17.** Һүҙҙәр төҙөп яҙ. Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.



**18.** Һүҙҙәрҙең өн моделен төҙө һәм уларҙы дөрөҫ итеп яҙ.











**19.** 

**Иләү.**

Ҡарағай төбөндә бейек ҡырмыҫҡа йорто. Үҙендә бик күп фатир. Унда ҡырмыҫҡалар йәшәй. Улар тегеләй ҙә былай йөрөп тора. Кемдер үлән ташый. Кемдер еләк тәгәрәтә... Берәү ҙә эшһеҙ тормай.

(Р. Сәйетборханова буйынса.)

**20.** Түбәндәге парлы һүҙҙәр тураһында нимә әйтерһең? Уларға ниндәй үҙенсәлек хас? Шундай һүҙҙәр уйлап әйт.

1) болон — ҡолон; 2) төтөн — төнөн; 3) тоҙло — боҙло; 4) морон — борон; 5) төплө — төрлө; 6) тәртә — кәртә; 7) һаман — ҡабан; 8) бөйөк — көйөк

**21.**

## Туп.

Таня илай ҡысҡырып,
Тубы төшкән йылғаға.
Ҡуйсы, Таня, илама,
Туп батмай ул йылғала.

(Агния Барто.)

**22.** Һүҙҙәр уйлап яҙ.



**23.** 

### Әкиәттәге кеүек.

Ҡып-ҡыҙыл бер туп шикелле,
Ҡояш сыҡты тәгәрәп.
Елдәр бышылдаған төҫлө:
— Йүгерәйек бергәләп.
Шат йылғаға күҙ һаламын —
Тулҡын өҫтөндә күбек.
Урман — тараҡ, йылға — көҙгө.
Әкиәттәге кеүек!

(Ҡадир Әлибаев.)

## Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Уларҙы тамғалау.

**24.** Түбәндәге хәрефтәр тураһында нимә әйтерһең? Уларҙы ниндәй үҙенсәлек буйынса ике төркөмгә бүлеп була?



**25.** Һүҙҙең һуңғы ижеген асыҡла һәм дәфтәреңә яҙ. Ниндәй һүҙ бер ижектән генә тора?



се . . .



та . . .



ҡаҙ



те . . .

● **1.** Ниндәй һүҙ артыҡ? Ни өсөн?
**2.** Һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

**26.** Бирелгән ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ. Был һүҙҙәрҙең һуҙынҡылары тураһында нимә әйтерһең?



27.

## Февраль.

Февраль — ҡыш айы. Ул иң һыуыҡ, буранлы ай. Февралдә ҡар күп була. Әсе һалҡын елдәр иҫә. Ай аҙағына көндәр йылый башлай.

**28.** Һүрәткә ярашлы һүҙҙе табып, һүҙбәйләнеш төҙө. Үҙеңә оҡшағаны менән һөйләм төҙөп яҙ.



**29.** Һүҙҙәр төҙөп яҙ. Нәҙек һуҙынҡыларҙың аҫтына һыҙ.




**30.** 

## Март.

Март — тәүге яҙ айы. Бөтә ерҙә уның һулышы һиҙелә. Ҡояш ныҒыраҡ йылыта. Аяҙ көндәр күбәйә. Ҡар ирей башлай. Бөтә тереклек йәнләнә.

**31.** Бирелгән хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.

ы,б,а,у; м,с,а,ы,т; р,т,а,ы,м; к,т,ү,ә,ә, р,ң; а,н,б,а,л; т,к,е,ү; ҫ,ө,л,ә,т; м,ә,п,т,к,ә; а,ы,т,л

**32.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙө. Уларҙы теҙеп яҙ.




**33.**

### Эшем көйлө...

Сигеү сикһәм —
Ебем йөйлө,
Иген икһәм —
Эшем көйлө.

Донъям бөтөн —
Ерле, өйлө,
Икмәгем бар,
Тормош көйлө.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.)

**34.** Тартынҡылар янына кәрәкле һуҙынҡылар өҫтәп, һүҙ яһап яҙ.

трҡ, сйнк, блмн, рк, тс, рнк, ҡрлғс, шкр, ктп

**35.** Тейешле һүҙҙәр өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Һуҙынҡы хәрефтәр аҫтына һыҙ. Улар тураһында нимә әйтерһең?

1. Шамил ... әҙерләй. 2. Ғәлим ҡуян ... . 3. Әсмә ҡурсағына ... тегә. 4. Байрам ... үтте. 5. Тейендең ҡойроғо ... ғына.

**36.** Тейешле ижек өҫтәп, һүҙҙе күсереп яҙ.

□□□лек, ба□□□, кү□□□, һи□□□, □□çек, □□□маҡ, һу□□□, тур□□□, эрем□□□, ши□□□, ту□□□, ы□□□.

**37.** 

1. Айрат саңғыла йөрөй. 2. Зилә ҡурсағына күлдәк текте. 3. Азат футбол ҡарарға ярата. 4. Ҡаҙ бәпкәләре менән һыу буйына төштө. 5. Ҡояш ҡыҙарып байыны.

**38.** Тейешле ижектәрҙе табып, һүҙ төҙөп яҙ. Нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙе 1-се, ҡалын һуҙынҡыларҙы 2-се бағанаға төркөмләп яҙ.

| | |
|---|---|
| ту | рау |
| ас | дәк |
| ут | ғыҙ |
| күл | кен |
| ир | ҡыс |

| | |
|---|---|
| аль | ғөл |
| дәф | төн |
| шө | лөш |
| бө | бом |
| ө | тәр |

**39.** Һөйләмде тулыландырып, күсереп яҙ.

1. Ағиҙелдә ... балығы күп. 2. Әсәйем салатҡа ... үләнен һала. 3. Упҡынкүл ... районында. 4. ... көндө беҙ киноға барҙыҡ. 5. Зәки театрҙа ... ҡараны.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: балет, шишәмбе, Асҡын, әнис, алабуға.

**40.**

### Ҡыш.

Аҡ ҡар баҫҡан яланды,
Ҡураларҙы, соланды,
Ябалаҡлап ҡар яуа,
Бөгөн буранлы һауа.
Иртә һалҡын яланда,
Ҡар бураны һеперә.

(Дауыт Юлтый.)

**41.** Һүҙҙең мәғәнәһен өлгө буйынса үҙгәртеп яҙ.

биш, ара, сәс, үҫә, һала, ҡоро, тура, ҡура, бал, мал, ҡул, кәмә, таш

Өлгө: яҙ — аҙ — уҙ, ... .

**42.** Һуҙынҡыға башланған предмет атамаларын 1-се, ә тартынҡыға башланғандарын 2-се бағанаға яҙ.



**43.** Таблицаны иғтибар менән ҡара. Һуҙынҡы өндәр тураһында нимә әйтерһең?

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 🟡 | [ә] | [ө] | [ү] | [э] | [и] |
| 🔵 | [а] | [о] | [у] | [ы] | - |

**44.** Бер һуҙынҡы йәки тартынҡы менән айырылыусы һүҙ төҙө һәм әйтеп яҙ.

.й — .й; ҡ.р — ҡ.р; б.й — б.й — б.й; б.л — б.л — б.л — б.л — б.л; т.р — т.р — т. р — т.р; ҡ.ш — ҡ.ш — ҡ.ш — ҡ.ш; а.ыш — а.ыш — а.ыш — а.ыш.

**45.** 

**Халыҡ шулай әйтә.**

Һау булайым тиһәң, туя ашама, ҡуя аша.

Һаулыҡ — ҙур байлыҡ.

**46.** Тартынҡы өндәр таблицаһын ҡара. Улар тураһында нимә беләһең? Һөйлә. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡыларҙы күсереп яҙ.

| | | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | Б | В | Г | Ғ | Ж | Д | Ҙ | З | Л | М | Н | Ң | Р | - | - | Й |
| | П | Ф | К | Ҡ | Ш | Т | Ҫ | С | - | - | - | - | - | Х | Һ | - |

**47.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе уҡы, әйтелешен иғтибар менән тыңла. Тартынҡы өндәр нәҙек һуҙынҡылар уратылышында нисек әйтелә? Ә ҡалын һуҙынҡылар уратылышында?

күбә — ҡуба, түрә — тура, бәлә — бала, ҡыҫа — кеҫә, томан — Төмән, һалмаҡ — һәлмәк

**48.** Яңы һүҙ килеп сыҡһын өсөн, һүҙҙең бер хәрефен үҙгәртегеҙ йәки алып ташлағыҙ.

бара — ...
ҡурай — ...
борон — ...
ишәк — ...
тараҡ — ...

тирәк — ...
арыш — ...
тишек — ...
ҡара — ...

**49.** Шиғырҙа әйтелеше оҡшаш булған һүҙҙәрҙе (рифмалы) тап. Был һүҙҙәр нисек айырыла? Уларҙы күсереп яҙ. 2—3 пар рифмалы һүҙҙәр уйлап яҙ.

## Өҫтәл янында.

Ашаным бер төлкөнө,  
Ҡыҙғаныҫмы, көлкөмө?  
Крокодилды ашаным,  
Фил кимерә башланым,  
Барыһы ла табында —  
Печеньелар ҡабында.

(Зарема Әхмәтйәнова.)

**50.** Рифмалы һүҙҙәр менән ике юллыҡтар төҙөгөҙ.

Өлгө: ҡараны — тараны

Вәли көҙгөгә ҡараны,  
Сәскәйҙәрен тараны.

бара — ҡара, шаян — баян, сөйҙө — көйҙө, көйөнөс — һөйөнөс, буялды — оялды, бәрәстәре — бәпестәре

**51.** 

### Банат.

Ағайым бирҙе  
Бик матур тараҡ,  
Бына сәсемде  
Ултырам тарап.

Һин дә сәсеңде  
Тарап үр, Банат,  
Кеше эшенә  
Тик торма ҡарап.

(Кәтибә Кинйәбулатова.)

## Һүҙҙе ижеккә бүлеү.

**52.** Һүрәттәге предмет тураһында һөйлә. Ул һиңә ниндәй байрамды иҫеңә төшөрә? Ниндәй хистойғолар уята?



Торт өҫтөндә нисә шәм яна?



Торт нисә өлөшкә бүленгән?

- 1. Тортта нисә шәм, шунса хәрефле өс һүҙ уйла. Уларҙы ижеккә бүл.

2. Торт нисә өлөшкә бүленгән, шунса ижекле дүрт һүҙ уйлап яҙ.

**53.** Түбәндәге һүҙҙәр араһынан иң аҙ һәм иң күп ижекле һүҙҙе күрһәт. Уларҙы төркөмләп, ижеккә бүлеп, күсереп яҙ.

урам, исем, ер, сөгөлдөрсөлөк, эш, бәшмәк, сәләмәтләндереүсе, бәшмәк, артыш, үҫемлек, көмөш, орлоҡ, тараҡ, юрған, миләш

- Иң оҙон һүҙҙең ижек һанын билдәләгәндә, нисек эш иттең? Шул хаҡта һөйлә.

**54.** Тексты уҡы. Уның йөкмәткеһен күршеңә һөйләп ишеттер. Үҙеңдең бесәйең тураһында һөйлә.

## Ҡояшлы тупһала.



Ишектән бесәйҙең башы күренде. Ул алғы тәпәйҙәре менән тупһаға баҫты. Муйынын һуҙып һауаны еҫкәне. Тирә-яҡҡа күҙ һалды. Унан йомшаҡ ҡына баҫып тупһанан төштө. Ҡояшта ниндәй рәхәт! Мыраубикә таҡтаға һуҙылып ятты. Ул иркәләнеп күҙҙәрен йомдо.

**55.** Бирелгән ижектәрҙән һүҙ төҙөп яҙ.

шер, ки; кәй, рә, се; ләк, бү; гәк, төр; лек, ү, ҫем; ҫәрт, ке,ке; ке, ү, рә; гөҙ, мө; тан, ур, сы; ғас, лан, я; се, бе, рен

**56.** 

## Яратҡан шөғөл.

Минең ағайым бар. Уның исеме Фәнил. Ул бишенсе класта уҡый. Яратҡан шөғөлө —

футбол. Ағайым «Динамо» спорт клубына йөрөй. Тренер уны маҡтай:

— Оҫта футболсы буласаҡ! — ти ул.

**57.** Һүҙҙәрҙе өс төркөмгә бүлеп яҙ. Уларҙы ниндәй үҙенсәлектәре буйынса төркөмләнең? Шул турала фекер алышығыҙ.

юлсы, үлән, бал, бүрек, ашхана, Юлай, үрмәксе, юрған, буран, аҡсарлаҡ, үрнәк, баҡыр, арҡан, үтенес, ат, бәҫ, юл, бөгөн

**58.** Шиғырҙы тасуири уҡы. Шиғырҙың һәр һүҙен юлдан юлға күсереү өсөн, ижектәргә бүлеп күсереп яҙ.

**Бал ҡорто.**

Матур сәскәләрҙе күрә,
Кәрзинкәләр ҙә үрә.
Ашы татлы, өйө затлы
Гел тырышҡанға күрә.

(Рауил Ниғмәтуллин.)

**59.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү өсөн ижеккә бүл.

аяҡ, уртаҡ, ҡыуыш, ҡояш, буя, ысыҡ, ҡарая, өсөнсө, яман, емеш, олатай

**60.** Һүрәтте ҡара. Ул һиңә оҡшаймы? Нимәһе оҡшай? Һүрәт буйынса бәләкәс кенә хикәйә төҙө. Түбәндәге бирелгән һүҙҙәрҙе ҡуллан.



Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: сағыу ҡояш, күк йөҙө, йәшел хәтфә кеүек, шатланды, сәпәкәй итте, күреп ғәжәпләнде, сәскә тирәләй сутылдашты.

**61.** Өс ижекте берләштереп, 5 һүҙ төҙөп яҙ. Оҡшаған һүҙҙәр менән һөйләм төҙө.

Өлгө: ҡарлуғас — Ҡарлуғастар бик бейек оса.

| | | |
|---|---|---|
| ҡар | бә | се |
| юл | йыр | рыҫ |
| үр | мәк | ләк |
| ал | ба | ғас |
| кү | лу | ҙан |

**62.**

## Йома — байрам.

Аҙнала ете көн. Уларҙың иң матуры — йома. Был көн изге һанала. Өләсәйем шулай, ти. Ул көндө өләсәйем мәсеткә бара. Өйҙә доғаларын уҡый. Ул беҙҙе кешеләргә изгелекле булырға өйрәтә.

**63.** Тартынҡылар янына тейешле һуҙынҡылар өҫтәп, һүҙ яһа. Уларҙы дәфтәреңә ижеккә бүлеп яҙ.

тғрҡ, хрф, сй, һндғс, йк, дрс

**64.** Һүрәттәрҙе ҡулланып, һөйләм төҙөп яҙ. Тәүге һөйләмдең һәр һүҙен юлдан юлға күсереү өсөн ижекkә бүлеп яҙ.


















**65.*** Бирелгән һүҙҙәрҙә һуҙынҡы өндәрҙе алмаштырып, яңы һүҙ төҙөп яҙ.

Өлгө: ҡар, суҡ — ҡурсаҡ.

| | |
|---|---|
| ҡар, суҡ | ас, тура |
| ут, ым, ҡарт | өс, йәл |
| ил, әрәм | ат, ҡыр |

**66.** Шиғырҙы уҡы.

**Бәпембә сәскәләре.**

Һыу буйында сипылдашып
Килһә ҡаҙ бәпкәләре,
Шул ҡәҙәре шатланалар
Бәпембә сәскәләре.

Шатланалар ҙа сәскәләр,
Үҙ таҡмағын әйтәләр.
Сонтор ҡанатын елпеп,
Бейеп китә бәпкәләр.

(Абдулхаҡ Игебаев.)



**1.** Күҙҙәреңде йом. Бәпембәле яланды күҙ алдыңа килтер: йәшел үләнде һап-һары бәпембәләр сыбарлаған. Сәскәләргә ҡыуанып бейегән ҡаҙ бәпкәләре...

Шиғырға ҡарата «телдән һүрәт төшөр» ҙә уны һөйлә.

**2.** Шиғырҙан бер, ике, өс ижекле һүҙҙәрҙе табып яҙ. Бер ижекле һүҙҙәргә бер һыҙыҡ, ике ижеклеләргә ике, өс ижекле һүҙҙәргә өс һыҙыҡ һыҙ.

## Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.

**67.** Һөйләмдәрҙе уҡы. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп яҙ.

1. Ҡоштар яҙҙы маҡтап һайрайҙар.
2. Төлкө ҡойроғо менән эҙҙәрен һеперен үтте.
3. Ҡошсоҡ әсәһен бик оҙаҡ көттө, асығып бөттө.
4. Ҡыҙҙар еләккә китте.

**68.** Өлгөлә күрһәтелгән һүҙҙе ҡуш тартынҡылы итеп үҙгәрт. Унан ижеккә бүлеп яҙ.

Өлгө: хат — хаттар, хат-тар

ҡаҙ, һаҙ, болот, ҡайт, күҙ, бөркөт, ҡатыҡ, ҡурсаҡ, кәрәҙ

**69.** Һүрәтте һәм схеманы ҡулланып, һөйләм төҙөп яҙ. Ҡуш тартынҡылы һүҙҙе ижеккә нисек бүлерһең? Һөйлә.





● **1.** Төҙөлгән һөйләмеңде киңәйт. Уның берәй һүҙен үҙгәрт.

**2.** Ҡыҙ менән футболсы малай ниндәй хис-тойғолар кисерә? Ҡыҙҙың кисерештәрен белгерткән һүҙҙәрҙе 1-се бағанаға, малайҙыҡын 2-се бағанаға бүлеп яҙ.

ҡурҡыу, шатлыҡ, ғорурлыҡ, шом, кинәнес, тертләү, ҡәнәғәтлек

**70.** Ижектәрҙе тейешле рәүештә берләштереп, ҡуш тартынҡылы һүҙ яһа. Уларҙы дәфтәреңә өлгөләге кеүек ижеккә бүлеп яҙ. Ҡуш тартынҡыларҙың аҫтына һыҙ.

Өлгө: **батты** — **бат-ты.**

| | | | |
|---|---|---|---|
| бат | те | ҡарт | ҙәр |
| һүт | то | һөт | ҙәр |
| бөт | ты | диңгеҙ | ҙар |
| ҡорот | тө | күҙ | тәр |
| | | йондоҙ | тар |

**71.** Һөйләмдәрҙең сиктәрен билдәлә. Дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

## Төнгө ҡар.

ҡар төнө буйы яуҙы ул йөрөр юлдарҙы япты бағана сымдарына ҡар йәбешеп ҡатты ҡайын ботаҡтары ергә эйелде

● Текстағы ҡуш тартынҡылы һүҙҙәрҙе тап. Уларҙы ижеккә бүлеп яҙ.

**72.*** Ике һүҙҙең хәрефтәренән бер һүҙ төҙөп яҙ.

Өлгө: уҡ, тал — туҡал

| | |
|---|---|
| уҡ, тал | үр, кем |
| ҡыл, шат | ат, йыш |
| йәл, ем | ат, сым |
| ҡар, уй | тар, ым |

**73.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп яҙ.




● 1-се төркөмдәге һүҙҙәр 2-сеһенән нимәһе менән айырыла? Нимәһе менән оҡшаштар?

**74.** Һәр һүҙҙе ике төрлө итеп ижеккә бүл. Беренсе осраҡта һүҙҙе ғәҙәттәгесә ижеккә бүл. Икенсе осраҡта — һүҙҙе юлдан юлға күсереү өсөн ижектәргә бүлеп яҙ.

Өлгө: у-мар-та, умар-та
ө-лөш, өлөш

ырғаҡ, үҫемлек, игенсе, ағаслыҡ, матурая, һарғая, усаҡлыҡ, уяу, ҡая, ошаҡсы, иҫәп, оя, илек, үтенес, егерме

**75.** 

## Борсаҡ.

Йәмил борсаҡ сәсте. Уға көн дә һыу һипте. Борсаҡ ашарлыҡ булып өлгөрҙө. Малай бер һауыт борсаҡ йыйҙы. Әсәһе унан аш бешерҙе. Борсаҡлы аш бик тәмле булды.

**76.** Һөйләмгә тейешле һүҙҙе ҡуйып күсереп яҙ.

Һоросай 

эсеп бөттө.

Айрат  көтөүгә ҡыуҙы.

Ғәлиә менән Сәриә  китте.

 икене алһаң, алты була.

Фәрит  һөйәк бирә.

**77.** Һәр бағананан берәр ижек алып, өс ижектән бер һүҙ төҙө.

Өлгө: түңәрәк.

| | | |
|---|---|---|
| тү | гәр | се |
| ту | ра | рәк |
| и | мырт | мәс |
| тә | йыр | сы |
| ҡа | ңә | ҡа |
| сы | ҡыу | сыҡ |
| у | ген | ғай |

**78.** Шиғырҙы тасуири уҡы. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү өсөн ижектәргә бүлеп яҙ.

## Ҡуңыҙ.

Ҡып-ҡыҙыл ҡуңыҙ күрҙе лә
Ата бесәй шаҡ ҡатты,
Өтәләнеп, сәбәләнеп
Мыйыҡтарын тырпайтты.

Шул ҡуңыҙҙы һоғонорға
Һағаланы ул оҙаҡ,
Ә күҙҙәре баҙлап янды,
Гүйә, тере ҡуҙ һымаҡ.

(Абдулхаҡ Игебаев.)

## Баш хәреф.
## Кешенең исем-фамилиялары яҙылышы.

**79.** Был һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлат.

Салауат Юлаев
Мостай Кәрим
Александр Пушкин

**80.** Уҡы. Баш хәреф менән яҙылған һүҙҙәрҙе тап. Улар ниндәй һүҙҙәр? Нисек яҙылалар? Баш хәрефле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

Өфөлә 1-се гимназия Рәми Ғарипов исемен йөрөтә. 20-се гимназия — Фатима Мостафина исемендә. Баш ҡалала Мәжит Ғафури исемендәге парк бар. Ленин урамындағы парк Иван Якутов иселе менән атала.

● Юғарыла телгә алынған шәхестәр тураһында нимә беләһең? Һөйлә. Белмәһәң, һораш.

**81.** Һөйләмдәрҙе тулыландырып күсереп яҙ. Орфограммаларҙы һыҙ.

1. Күрше ___ бабай △ ___ әбейгә мин ярҙам итәм.
2. Ағайым ___-___ яҙған китапты һатып алды.
3. Атайымды эшендә ___-___ улы тип йөрөтәләр.
4. Мәктәп китапханаһыһы — ___ апай.

**82.** Һүрәттәрҙе ҡулланып, телдән һөйләмдәр төҙө. Ундағы кеше исемдәрен күсереп яҙ.





**83.** Яҙыусыларҙың исемен, фамилияларын күсереп яҙ.

Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Абдулхаҡ Игебаев, Сафуан Әлибаев, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Гөлфиә Юнысова, Факиһа Туғыҙбаева, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.

● Күрһәтелгән авторҙарҙың «Әлифба» дәрестәрендә уҡыған әҫәрҙәрен иҫеңә төшөр. Улар тураһында нимәләр беләһең, һөйлә.

**84.**

**Мин бер малай.**

Беҙҙең өйҙә алты ҡыҙ бар:
Ләлә, Милә, Гөлгөнә,
Гөлнәзирә, Гөлсөм, Дилә,
Мин — малай бер генә.

(Кәтибә Кинйәбулатова.)

**85.** Кеше исемдәре төҙөп яҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| Ба | са | Са | нур |
| Ша | нур | Гөл | фа |
| Кө | тыр | Зи | дәр |
| Ай | мил | Миң | ҙә |
| Ғай | рим | Сәй | ра |

Кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме баш хәрефтән яҙыла:
**Аҡъюлова Гөлсөм Әсләм ҡыҙы.**

## Хайуан ҡушаматтары.

**86.** Йорт хайуандарының ҡушаматтары менән таныш. Уларҙы дәфтәреңә күсереп яҙ.

Әнисәнең бесәйе Һоросай ҡушаматлы. Мансурҙыҡы — Иркәбикә. Айнурҙыҡы — Мыяубай. Таһирҙың этен Ҡараҡолаҡ тип йөрөтәләр. Күршеләрҙекен — Муйнаҡ.

● Ә һеҙҙең бесәйегеҙҙең йә этегеҙҙең ҡушаматы нисек? Һөйләгеҙ.

**87.** Йорт хайуандарының ҡушаматтарын яҙ. Шулар менән 1—2 һөйләм төҙөп яҙ.

Хайуан ҡушаматтары баш хәрефтән яҙыла:
**Ҡупшыҡай** (бесәй), **Аҡбай** (эт), **Ҡуңырбуға** (һыйыр) һ. б.

**88.** Һүрәттәге хайуандарға, уларҙың тышҡы ҡиәфәттәренән сығып, исем ҡуш.









**89.** Һүрәтте ҡара. Унын буйынса һөйләшеү ҡороғоҙ.



1. Һүрәттәге урман аҡланы һиңә оҡшаймы? Нимә бигерәк күңелеңә хуш килде?

2. Кейектәр ни менән мәшғүлдәр?

3. Тейен балаһы терпеләргә нимә әйтергә теләй?

4. Түбәндәге һүҙҙәрҙе ҡулланып, телдән ҡыҫҡа ғына әкиәт төҙө.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: гөл-баҡсалай, хуш еҫле сәскәләр, матур аҡлан, күп төрлө, һоҡланып ҡарай, ҡәнәғәт, сәләм бирҙе, тирә-яҡ нурланды, ҡышҡа әҙерлек, аҙыҡ, күреп шатланды.

**90.** Һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Баш хәреф менән яҙылған һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ. Уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлат.

1. Күрше Оморҙаҡ ағайҙың аты Кират ҡушаматлы. 2. Зәлифә инәйемдең Һөтлөкәйе быҙауланы. 3. Ерәнсәйҙең ҡолоно Аҡбәкәл һөт имә. 4. Беҙҙең бесәй Ҡарасай бик уңған. Ул төнө буйы сысҡан тота.

**91.** Йорт хайуандары ҡушаматтарын уҡы. Ҡайһыһы ниндәй хайуандыҡы? Төркөмләп яҙ.

Аҡтояҡ, Бөйрәкәй, Аҡтүш, Ҡарабай, Аҡъял, Йондоҙҡашҡа, Бүләкбикә, Толпар, Ҡарағолаҡ, Наҙлыҡай, Дүрткүҙ, Аҡтырнаҡ, Аҡбуҙат, Шоңҡар.

**92.**

### Тоғро дуҫтарым.

Өйҙә көн-төн ҡарарға
Ҡуштым тоғро Аҡбайға.
Алты бәпкәне һаҡларға
Бойороҡ бирҙем Сарбайға.

## Ер-һыу атамалары.

**93.** Баш хәреф менән яҙылған һүҙҙәргә иғтибар ит. Улар ни өсөн ҙур хәрефтән башлап яҙыла? Баш хәрефле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

### Тыуған төйәк.

Минең тыуған республикам — Башҡортостан. Уның баш ҡалаһы — Өфө. Мин йәшәгән ҡала — Сибай. Бында Зәки Вәлиди урамы бар. Ҡала театры Арыҫлан Мөбәрәков исемен йөрөтә. Эргәнән Төйәләҫ йылғаһы аға.

**94.*** Картаны иғтибар менән өйрән.

- Был карта тураһында нимә әйтә алаһың?

Картала төшөрөлгән ҡалалар исемен тап. Һәр ҡала Башҡортостандың ҡайһы өлөшөндә (көньяҡ, төньяҡ, көнбайыш, көнсығыш) урынлашҡан? Ҡала исемдәрен күсереп яҙ.




Башҡортостанда тағы ниндәй ҡалалар бар? Һанап сыҡ.

● Сиктәш өлкәләрҙең, республикаларҙың исемдәрен тап. Уларҙы дәфтәреңә күсереп яҙ.

**95.** Һөйләмде тулыландырып күсереп яҙ.

Мин Башҡортостандың (йәшәгән райондың исеме) ... районында йәшәйем. Беҙҙең ауылдың исеме ... . Ул ... (йылға йәки тау атамаһы) буйында урынлашҡан.

**96.** Йәшәгән районың тураһында нимәләр беләһең? Һөйлә. Белмәһәң, һораш, белеш.

Һин йәшәгән район нисек атала?
Уның үҙәге нисек исемләнә?
Район аша ниндәй йылғалар аға?
Күлдәр бармы?
Ниндәй тауҙар бар?
Билдәле шәхестәре кемдәр?

**97.** Ҡала исемдәрен уҡы. Уларҙы ике төркөмгә бүл. Ниндәй үҙенсәлек буйынса төркөмләнең? Үҙеңә оҡшаған төркөмдө дәфтәреңә күсереп яҙ.

Учалы, Мәскәү, Ағиҙел, Санкт-Петербург, Нефтекама, Орёл, Томск, Силәбе, Пермь, Мәләүез, Баймаҡ, Грозный, Омск, Салауат

**98.**

1. Беҙҙең Мәмбәт менән Сурағол араһы 5 км.
2. Өршәк, Дим, Сәрмәсән буйында мең ырыуы башҡорттары йәшәй.
3. Ирәмәл башынан Ағиҙел башланған ерҙәр күренә.
4. Иң матур ҡая таштар Бөрйәндә.

Ил, ҡала, ауыл, күл, йылға, тау атамалары баш хәрефтән яҙыла: **Өфө, Ағиҙел.**

# Һөйләм.

**99.** Һөйләмгә һүҙ өҫтәп, киңәйтеп яҙ.

1. Йәй килә. 2. Ҡоштар ҡайта. 3. Күбәләктәр оса. 4. Айыу йоҡлай. 5. Йылға аға. 6. Уҡыусы уҡый.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: төрлө, шәп, йәмле, тыуған яҡ, китап, ҡыш.

**100.**

**Яңы көн.**

Яңы көн тыуа. Ҡоштар күңелле сутылдаша. Бөжәктәр мәж килә. Хайуандар йоҡонан уяна. Һаумы, ҡояш! Хәйерле иртә!

**101.** Һүҙҙәрҙән һөйләм төҙөп яҙ.



**102.** Йомаҡтарҙың яуабын тапһағыҙ, кроссвордты сисерһегеҙ.




1. Үҙе аҡ — ҡар түгел.

   Үҙе шыйыҡ — һыу түгел.
2. Өй башында айыу бейей.
3. Өй башында ярты икмәк.
4. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ — ҡапҡа аса.
5. Башы тараҡ, ҡойроғо ураҡ.
6. Ҡыҙарып беште, ергә төштө.

**103.** Һөйләмдең сиктәрен билдәлә. Дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

ҡырмыҫҡа ояһына һалам ташый йәшел үләндә бәпкәләр йөрөй талда һандуғас һайрай ҡупшы тейен сәтләүек сиртә йүкә ағасынан бал еҫе килә

**104.** Ижектәрҙән предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр төҙөп яҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| туп | ма | ҡар | соҡ |
| таҫ | ләм | жур | тәр |
| ур | тәл | ҡош | лан |
| ҡә | раҡ | дәф | буз |
| өҫ | ман | бо | нал |

**105.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙе өҫтәп, һөйләмде күсереп яҙ.

1.  емешен ҡоштар ашарға ярата.

2. Көслө ел  аса.

3. Тау битен  сәскәләре япҡан.

4. Ямғырҙан һуң  сыҡты.

5.  төшөп ярылды.

106. 

**Икмәк.**

Икмәк бешерҙе әсәйем,
Таралды тәмле еҫе.
Сәй эсәбеҙ беҙ күмәкләп,
Шау-гөр килә өй эсе.

(Фатиһа Туғыҙбаева.)

**107.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр яһап яҙ.




## Хәбәр һөйләм.

**108.** Һөйләмдең сиген билдәлә. Уны дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

Өфө ҡалаһы матур уның урамдары йәмле яҡты ҡала йорттары бейек урамда сәскә түтәлдәре күп беҙ баш ҡала менән ғорурланабыҙ

**109.** Һорауҙарға яуап яҙ. Уларҙы ҡулланып, үҙең тураһында һөйлә.

Һин ҡайҙа (район, ауыл, ҡала) йәшәйһең? Исемең кем? Һиңә нисә йәш? Нисәнсе класта уҡыйһың?

110. 

**Тыуған ерем.**

Тыуған илем — беҙҙең урам,
Тыуған яғым — ҡуйы урман,
Тыуған ерем — бешкән балан,
Гөл-сәскәле йәшел ялан.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.)

**111.** Һүҙҙәрҙе тейешле урынға ҡуйып, һөйләм төҙөп яҙ.






**112.** Уҡы. Мәҡәлдең дауамын икенсе бағананан табып, берләштереп күсереп яҙ. Уның мәғәнәһен аңлат.

| | |
|---|---|
| Аҙ һөйлә, | бер ҡат киҫ. |
| Эше барҙың — | күп эшлә. |
| Ете ҡат үлсә, | ашы бар. |

**113.** 

## Дилара.

Дилара иртә тора. Урынын йыйыштыра. Физик күнекмәләр яһай. Унан һуң йыуына. Иртәнге аш ашағас, мәктәпкә китә. Дилара — бик тырыш ҡыҙ. Уны әсәһе маҡтай, ярата.

**114.** Кем (нимә) нисек хәрәкәт итә? Ҡәләм ярҙамында һыҙыҡтар менән тоташтыр. Һүҙбәйләнештәр менән бер нисә һөйләм төҙө.









шыуыша

йөҙә

кешнәй

бата

имгәкләй

ырғый

мыяулай

уйнаҡлай









Һөйләм баш хәрефтән башлап яҙыла:
**Бөгөн көн йылы.**

**115.** Тексты уҡы. Һөйләргә өйрән. Һуңғы 4 һөйләмде күсереп яҙ.

## Аҡбай.

Аҡбай өй алдына сыҡты. Унда бәләкәй Айгизә менән апаһы Сәлимә уйнап йөрөй. Эт Айгизә янына килде. Ул ҡойроғон болғай-болғай уның тирәһендә уралды. Шаян ҡыҙыҡай Аҡбайҙы ҡосаҡлап алды. Ярата шул Айгизә уны! Аҡбай ҙа ҡыҙыҡайға ҡарап ҡойроғон болғай.

- Хикәйәлә кемдәр (нимәләр) тураһында һүҙ бара? Улар тураһында нимәләр белдең? Мәғлүмәтле булыуға нисек ирештең? Һиңә нимә ярҙам итте?

**116.** Мәҡәлгә тейешле һүҙҙе табып ҡуй. Уларҙы күсереп яҙ.

1. Тамсы ... тишер. 2. Бер ҡарға .... килтермәç. 3. Батыр бер үлер, ... мең үлер. 4. ... ашы — ҡара-ҡаршы. 5. Ат тауҙа, ... яуҙа һынала.

- Үҙеңә оҡшаған мәҡәлдең мәғәнәһен аңлат.

## Һорау һөйләм.

**117.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Уларҙың аҙағында ниндәй тамға ҡуйылған? Ни өсөн?

Өлгө: Өфө ҡалаһы Стәрлетамаҡтан ҙурыраҡ.

Ниндәй ҡала ҙурыраҡ — Өфөмө әллә Стәрлетамаҡмы?
Ҡайһы хайуан ҙур — айыумы, мышымы?
Ҡайһы йылға оҙонораҡ — Ағиҙелме әллә Һаҡмармы?
Ниндәй ҡала ҙурыраҡ — Мәскәүме әллә Өфөмө?
Ниндәй планета ҙурыраҡ — Ерме әллә Аймы?

● Яуап бирергә ҡыйынһынһаң, өлкәндәрҙән һораш. Һорау һөйләмдәрҙе тейешле тауыш менән уҡырға өйрән. Һорауҙарға яуапты өлгөләге кеүек яҙ.

**118.** 

### Белгем килә.

Ҡояш байып йоҡлағас та,
Ҡайҙа була нурҙары?
Йылға аға бер туҡтамай,
Ҡайҙа китә һыуҙары?

Белгем килә, белгем килә,
Ҡайҙан сығып, ел иҫә?
Һорауҙарым тыуып тора
Бер-бер артлы, бер нисә.

(Миңлеяр Дилмөхәмәтов.)

**119.** Һөйләмде тулыландырып күсереп яҙ.

1. ☐ ауырлығы 3 кг. 2. Бейә һөтөнән ☐ эшләйҙәр.

3. Аттар ☐ ашарға ярата. 4. Һарыҡ ☐ былау бешерәләр.

5. Эттәр 15—20 ☐ йәшәй.

**120.** Һүрәттәрҙе иғтибар менән ҡара. Ундағы геройҙар нимә хаҡында һораша, белешә тип уйлайһың? Һүрәттәрҙәге тәбиғәт күренеше тураһында һөйлә.





**121.** Һәр хәбәр һөйләмде һорау һөйләмгә әйләндереп әйт. Был мәлдә һин ниндәй хис-тойғолар кисерәһең (ҡыуаныу, ҡыҙыҡһыныу, ғәжәпләнеү, бойоғоу, һоҡланыу, үпкәләү, үкенеү, икеләнеү)?

Һин бөгөн бишле алдың.
Тышта көн матур.
Һинең ҡустың бәләкәй генә.

**122.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Үҙеңә оҡшаған 2-3 яуапты дәфтәреңә яҙып ҡуй.

Ҡара ҡарғалар беҙгә йылы яҡтан ҡасан ҡайталар?
Рәсәйҙең баш ҡалаһы нисек атала?
Ер йөҙөндә иң ҙур хайуан нимә?
Ниндәй хайуан һыу эсмәй оҙаҡ сыҙай ала?

Б е л е ш м ә  ө с ө н  һ ү ҙ ҙ ә р: дөйә, март, Мәскәү, зәңгәр кит.

**123.** Һөйләм төҙөп яҙ. Һәр һөйләмдә нимә тураһында хәбәр ителә? Шул турала һөйлә.

1.  .

2. 

3. 

4. 

**124.** 

## Уралтау.

Кәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау.
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау.

**125.** Бирелгән һөйләмдәрҙе һорау һөйләмгә әйләндер һәм уға яуапты өлгөләге кеүек яҙ.

1. һыйыр һауа. 2. — мәктәпкә киттеләр.
3. беренсе космонавт булған.
4. — Рәсәйҙәге иң ҙур ҡала.

Өлгө: «Өс таған» повесын яҙған.
«Өс таған» повесын кем яҙған? Мостай Кәрим.

# Өндәү һөйләм.

**126.** Һүрәттәрҙе ентекләп ҡара. Ундағы геройҙарҙың эш-хылыҡтары тураһында нимә әйтерһең? Һәр герой ниндәй хис-тойғолар кисерә? Һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙө. Уларҙы тейешле интонация менән уҡы.



Эх, һин, Ҡылыйкүҙ!



Ниндәй матур минең бәләкәстәрем!

**127.** 126-сы күнегеүҙең тәүге һөйләменә 1-2 һүҙ өҫтәп, түбәндә күрһәтелгән хис-тойғоларҙы белдереп уҡы:

үпкәләү
үтенеү
бойороҡ
ғәжәпләнеү

**128.** Түбәндәге хис-тойғоларҙы белдергән һүҙ-ҙәр ниндәй ситуацияларҙа ҡулланыла? Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.




**129.** Өндәү һөйләм төҙөп яҙ.

1) ҡотлайым, менән, байрам 2) ғына, етегеҙ, имен-һау, ҡайтып 3) икән, матур, бигерәк, көлдәгең 4) буйында, күрҙем, Еҙем, торналар

**130.** Күсереп яҙ. Өндәү һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡы. Шиғырҙы бер-берегеҙгә уҡып ишеттерегеҙ.

## Бәләкәй өй.

Туҡ-туҡ!..
Бына сөй,
Яһайбыҙ бәләкәй өй.
Ямал тотҡас таҡтаны,
Шәриф ҡаға башланы.
Туҡ-туҡ!..
Эш ҡыҙа.
Сүкеште һуҡма яҙа!

Бына башы ҡуйылды,
Кескәй ишек уйылды.
Эй сыйырсыҡ,
сыйырсыҡ,
Кескәй өйҙө
ҡарап сыҡ!

(Айһылыу Йәғәфәрова.)

**131.** Бишек йырын ятла. Уны яттан яҙ.

### Әлли — бәлли.



Әлли-бәлли, бәү-бәү!..
Әлли-бәлли, бәү-бәү!
Бәләкәй генә улыма,
Быйма алырбыҙ һатып,
Аяҡтарына кейҙереп,
Ебәрербеҙ атлатып.
Юлай йөрөр топ-топ,
Яңы быйма һоп-һоп!..



(Айһылыу Йәғәфәрова.)

- Ниндәй бишек йырҙары беләһең? Иҫеңә төшөр.

**132.** Йомаҡтарҙы сис. Яуаптарын тейешле шаҡмаҡҡа яҙып сыҡһаң, кроссвордты сисерһең.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | 1 | | Ө | | | |
| 2 | | | | | Н | | | |
| | | | | 3 | Д | | | |
| | һ | ө | й | л | ә | м | | |
| | | | 4 | | Ү | | | |

1. Үҙе аҡ — ҡар түгел,
   Үҙе шыйыҡ — һыу түгел.
2. Өй башында айыу бейей.
3. Эйәре үҙендә — атлан да кит.
4. Ишектән инә, сөйгә ҡуна.

**133.** Беренсе бағаналағы һүҙгә икенсе бағананан ярашлы һүҙҙе эҙләп тап. Был һүҙбәйләнеште ҡулланып, һөйләм төҙөп яҙ.

| | |
|---|---|
| китап | хәлен белеш |
| ишекте | дөрөҫ ултыр |
| өләсәйҙең | телефондан һөйләшмә |
| парта артында | уҡығыҙ |
| спектакль барғанда | яп |

**134.** 

### Сәләм.

Сәләм, тием, сәләм!
Өр-яңы тыуған көнгә.
Сәләм, тиеп көн башлаһам,
Шатлыҡтар ята иңгә.

Сәләм, тием, сәләм!
Иң яҡын күргән йәнгә.
Сәләм, тиеп көн башлаһам,
Донъям күмелә йәмгә.

(Динә Талхина.)

**135.** Әкиәттән өҙөктө уҡы. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе тейешле интонация менән уҡы. Өндәү һөйләмдә ҡайһы һүҙгә баҫым төшә? Шуны күҙәт. Үҙеңә оҡшаған 2-3 өндәү һөйләмде күсереп яҙ.

## Кәзә нисек итеп үҙенә өй һалды?

(Рус халыҡ әкиәте)

— Алмағас! Һинең ботағың аҫтында өй һалырға мөмкинме?

— Ярамай! Алмаларым ергә төшөр ҙә бәрәстәреңде имгәтер. Бар икенсе ергә кит!

Кәзә шыршы янына килә лә:

— Шыршы! Һинең эргәңдә өй һалырға мөмкинме? — ти.

— Ярамай! Тубырсыҡтарым ҡойолоп, бәрәстәреңде имгәтер. Яҡшыраҡ урын тап!

Кәзә уҫаҡ эргәһенә килә:

— Уҫаҡ! Һинең эргәңдә өй төҙөргә мөмкинме?

— Минең япраҡтарым көн-төн шаулай. Бәрәстәреңә йоҡларға ирек бирмәҫ шул, уңайлыраҡ урын эҙлә!

Кәзә ҡайын янына килә:

— Ҡайын! Һинең эргәңдә өй төҙөргә мөмкинме?

— Төҙө әйҙә! Мин һинең балаларыңды эҫенән һаҡлармын! Ямғырҙан, елдән йәшерермен!

Кәзә ҡыуанып китә. Ҡайын аҫтында үҙенә матур өй һала ла бәрәстәре менән шунда рәхәтләнеп йәшәй башлай.



● **1. Уҫаҡ, уңайлы, эҫенән, ирекле, ярамай** һүҙҙәрен юлдан юлға күсерер өсөн ижекләп яҙ.

**2. Япраҡтарым, тубырсыҡтарым** һүҙҙәрендә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе күрһәт.

## О-ө хәрефле һүҙҙәр.

**136.** Һүҙҙәрҙе ике төркөмгә бүлеп яҙ.

оло, өлкән, ойоҡ, өсөнсө, борос, бөйөк, һөлөк, һоро, ҡорос, көсөк, бөгөн, борон, толоп, төлкө, йөҙөк, йомоҡ, өлгө, осош

**137.** Тейешле ижекте табып, һүҙ яһап яҙ.




**138.** Һөйләмгә тейешле һүҙҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

Аҡбай — Тәлғәттең ... дуҫы. 1 апрель ... кисәһе булды. Сәлим ... өләсәһенә ҡунаҡҡа килде. Олатайым бейәһен ... менән һыйлай. Болон буйлап ... саба. Һалҡын көндө мөрйәнән ... тура сыға.

**Белешмә өсөн** һүҙҙәр: көлкө, төтөн, тоғро, поло, бөгөн, ҡолон.

**139.**

### Тиле көсөк.

Әллә уйнап, әллә ысын,
Өрә йыйып бөтә көсөн,
Өрә күркә, әтәскә,
Өрә ҡара бәрәскә,
Өрә быҙауға, тайға,
Хатта күктәге айға:
— Һау-һау-һау!

(Шамил Анаҡ.)

**140.** Тейешле ижекте табып, һүҙ яһап яҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| моң | ғо | һө | гөҙ |
| той | ҡо | бө | лөк |
| һоҫ | ғо | мө | гө |
| бор | ро | шө | төн |
| тоғ | ло | көҙ | көр |

**141.** Шиғырҙы уҡы. О-ө хәрефле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

### Әсәйем өйҙә юҡта.

Әсәйем өйҙә булмағас,
Күңелһеҙ миңә бөгөн.
Исмаһам, тинем бесәйгә,
Һөйләшергә юҡ телең.



Килгәйнем тәҙрә янына,
Кескәй генә бер ҡошсоҡ
Ҡоймаға килеп ҡунды ла
Ултыра, китмәй осоп.

Йәлләп ҡуйҙым
шул ҡошсоҡто,
Ниңә күңелһеҙ икән?
Әллә уның да әсәһе
Бөгөн өйҙә юҡ микән?

(Әнисә Таһирова.)

**142.** Йомаҡтың төшөп ҡалған һүҙен ҡуйып уҡы. Уны сис.

1. Үкерә лә ____ ,
Бөтә ерҙе тултыра.

2. Ҡарамаҡҡа арба төҫлө,
Арба тиһәм, тәртә юҡ.
Үҙе ____ , ____ ташый,
Тиңләштерер нәмә юҡ.
Ҡойҙом һиңә бер йомаҡ:
Йә, нимә ул? Уйлап тап!

3. Йәйен ____ , ҡышын аҡ,
Ҡыҫҡа ____ , шеш ҡолаҡ.

## Ү-у хәрефле һүҙҙәр.

**143.** Һәр һүҙҙең парын табып, дәфтәреңә күсереп яҙ.

Өлгө: түрә — тура, күрә — ҡура һ. б.

була, сүрә, һура, суҡыш, түҙә, булә, Сура, уҡына, утәй, һүрә, туҙа, утай, күнәк, үрә, суҡый, ҡунаҡ, сүкеш, үкенә, сүкей, ура

**144.** Һүрәтле диктант яҙ.











**145.** Шиғырҙы тасуири уҡы. Шиғыр һәм һүрәт буйынса ямғыр тураһында һөйлә.



**Ямғыр.**

Килде лә болот,
Күк йөҙө тулып,
Ергә һибелде
Тамсылар булып.

Кемдер, дөбөрләп,
Күккә ут яҡты,
Яҡтыртып ҡапыл
Бар тирә-яҡты.

Асыулы ямғыр
Ҡоя ла ҡоя.
Тиҙ генә утты
Һүндереп ҡуя.

(Гөлфиә Юнысова.)

**146.** Схема буйынса һүҙҙәр яһап яҙ. Шул һүҙҙәр менән 2 һөйләм төҙөп яҙ.



**147.** Шиғырҙы уҡы. Һүрәт буйынса әкиәтте һөйлә.

Шиғыр юлдарының ҡайһыһы ниндәй һүрәткә тура килә? Уҡып иштеттер.

## Бесәйҙең өйө яна.

(Рус халыҡ ижадынан.)



Саңҡ-саңҡ! Саң ҡаға,
Бесәйҙең өйө яна!
Бесәйҙең өйө яна!
Төтөнө сыға ана!

Бесәйҙең ҡото осоп,
Килеп сыҡҡан урамға!
Биҙрә тотоп йүгерә
Тауыҡ ут һүндерергә.





Эт — мейес һеперткеһе,
Ат фонарь тотоп алған,
Япрағын болғай-болғай,
Ашыға һоро ҡуян.

Бер, ике, өс!
Бына ҡайҙа көс!
Ялҡын артҡа һикерҙе,
Ут бөтөнләйгә һүнде!



● **У-ү** хәрефле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

## Э хәрефе һүҙ башында. Һүҙ уртаһында е хәрефе, [э] өнө.

**148.** Предметтың атамаһын яҙ.













**149.** Һүҙҙәрҙе ике төркөмгә бүлеп яҙ. Һүҙ башында һәм уртаһында [э] өнө ниндәй хәреф менән тамғалана?

эре, кесе, эйәк, мең, эремсек, теремек, энәғараҡ, үҫемлек, эңер, эсемлек, беренсе, эйәрә, һепертке, мейес

**150.** Төшөп ҡалған хәрефте ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.

1. Оло.йек йылғаһы ташты. 2. .тенсе майҙа муйыл сәскә атты. 3. Әсәйем .ремсек .шләне. 4. Б.сәй м.й.с башында ята. 5. Өләсәй .йәненә б.йәләй бәйләне.

**151.** Шиғырҙы уҡы. **Е** һүҙ башында, уртаһында һәм э һүҙ башында яҙылған осраҡтарҙы тап. Ул һүҙҙәрҙе өс бағанаға күсереп яҙ.

## Хаҡмы икән был һүҙҙәр?



Теремек тә, зирәк тә мин,
Шундай шаян, шундай
шуҡ,
Етмеш ете һөнәр беләм,
Эшләмәгән эшем юҡ...



Атайымдың ерән ҡашҡа
Атҡайына атланып
Елгән саҡта бөтә ауыл
Ҡарай миңә таң ҡалып.



Уҡты ла мин мәргән атам,
Шәп һуғам сәкәнде лә,
Телгә тиһәң, шаҡ ҡатырып
Ҡуйырмын сәсәнде лә.

Гөлдәр шытып сығыр төҫлө
Минең баҫҡан эҙемә.
Бигерәк уңған малаймын, тип
Һоҡланам үҙ-үҙемә.



Ә шулай ҙа ҡайһы саҡта
Ишетәм төрлө һүҙҙәр.
Ни өсөндөр тиҫтерҙәрем
Мине маҡтансыҡ, тиҙәр.
Хаҡмы икән был һүҙҙәр?!

(Абдулхаҡ Игебаев.)

Шиғыр кем тураһында? Малай һиңә оҡшаймы? Ни өсөн? Үҙ-үҙеңде маҡтау килешәме? Шул хаҡта һөйләшеү ҡороғоҙ.

**152.** 

**Хәйлә.**

— Эшкә китмәһен әсәйем,
Иртәнсәк иртә тороп, —
Тип уйлап алды ла Илдар
Сәғәтте ҡуйҙы бороп.

(Абдулхаҡ Игебаев.)

## Й хәрефе ҡайҙа һәм ҡасан яҙыла?

**153.** Бирелгән модель буйынса һүҙҙәр төҙөп уҡы. Уларҙы күҙәт. **Й** хәрефе һүҙҙең ҡайһы өлөшөндә тора (башы, уртаһы, аҙағы)? Ул ниндәй һуҙынҡылар менән йәнәш яҙыла?




**154.** Һүҙҙәрҙе күҙәт. Уларҙы сағыштыр. Һүҙҙәрҙе нисә төркөмгә бүлер инең? Ни өсөн?

йәй, йөҙөк, йүн, йәмле, йыл, йом, йүләр, йома, йәйғор, йылан, йәнәш, йөн, йүгән, йонсоу, йөрәк, йөҙгөс

**155.** Күсереп яҙ. Һүҙҙәрҙә **йә, йө, йү, йе, йо, йы** ҡушымсаларын һыҙ.

1. Йәйен йылғаның һыуы кәмей. 2. Бөрйәндең урмандары йәмле. 3. Март айында көндәр йонсоу булды. 4. Йүнсел кеше иртә тора. 5. Һөйөклө әсәйеңде көйҙөрмә. 6. Сыйырсыҡ моңло йырлай.

**156.** Һүҙҙәрҙе өс төркөмгә бүлеп яҙ (**й** хәрефе һүҙ башында, аҙағында, уртаһында).

көйә, һыбай, сөйәл, һөйәк, турғай, йөнтәҫ, ҡурай, уйсан, йүләр, йәрәхәт, төйәк, йомош, йылғыр, мыйыҡ, көйәнтә, малай, йүкә

**157.** Һүҙҙәргә **йә, йө, йү** ҡушымсаларына бер, ә **йо, йы** ҡушымсаларына ике һыҙыҡ һыҙып, күсереп яҙ. Үҙеңә оҡшаған ике һүҙбәйләнеш менән һөйләм төҙөп яҙ.

йүгерек ҡуян, йөнтәҫ ҡарышлауыҡ, йомро икмәк, бөйөк шәхес, ашығыс йомош, йәмле йәй, семәрле көйәнтә, серле йомаҡ, йор һүҙле, бейәләй бәйләй, бойоҡ йөҙ, ырыу йыйыны, йүнсел атай

**Й** хәрефе һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында яҙыла: **йәй, бейә, өй.**

# Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәреф-тамғалары.

**158.** Һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәреф-тамғалары алдында торған тартынҡы нисек әйтелә? Нәҙекме, ҡалынмы? Был һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәреф-тамғалары ниндәй эш башҡара?

кухня, Катя, люкс, нефть, Лёня, монтёр, лётчик, ферма, меню, Фёдор, моряк

**159.** Һүрәттә күрһәтелгән предмет атамаһын белдергән һүҙҙең өн моделен ҡулланып, транскрипциялап яҙ. Был һүҙҙәрҙе орфографик һүҙлектән эҙләп тап, дөрөҫ итеп яҙ.







**160.** Өн моделенә ярашлы рус малай-ҡыҙҙарының һәм ағай-апайҙарының исемдәрен дөрөҫ итеп яҙ.



[к … ]



[в … ]



[л … ]



[п’ … ]



[л’ ….]

**161.** Шиғырҙы уҡы. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе тап. Уларҙың өн моделен эшлә. ё, ь тамғалары һүҙҙә ниндәй эш башҡара?

## Шахтёр.

Шахтёр таба таш күмер,
Өйгә яғыулыҡ булыр.
Аҡ тештәре ялтырай,
Ҡулында фонарь шалтырай.

**162.** Транскрипциялағы һүҙҙәрҙе хәрефтәр менән яҙып ал. **е, ё, ю, я** тамғаларының һүҙҙә ниндәй эш башҡарыуын аңлат. Аҙаҡтан һүҙҙәрҙе һүҙлек буйынса тикшер.

[т’эл’эфон], [п’эт’а], [т’ул’эн’], [рул’этка], [п’энал], [ал’аска], [г’эрой’], [каст’ум], [пол’ус], [пал’ар] төн

**163.**

**1.** Таня менән Ғәлиә Ленин скверы янына килделәр. 2. Слесарь торбаны таҙартты. 3. Опера һәм балет театры бик матур. 4. Атайым люстра һатып алды. 5. Көн режимын һәр уҡыусы үтәргә тейеш. 6. Мин тюбиклы крем һатып алдым.

● Һүҙҙәрҙә ҡалын хәреф менән билдәләнгән тартынҡы өн нисек әйтелә? Ни өсөн?

**164.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп күсереп яҙ. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** тамғаларын һыҙ.

флейта, тюль, флюгер, тюльпан, сюрприз, рейс, педаль, кедр, дежур, боксёр, самолёт

**165.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙең өн моделен эшлә. Уны транскрипцияла, аҙаҡтан хәрефтәр менән яҙ.





- Был һүҙҙә **ё** хәреф-тамғаһы ниндәй эш башҡара?

## Ю хәрефе.

**166.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

[йурамал], [йушҡын], [йурған], [йул], [йурау], [йуҫыҡ], [йулаҡ], [йулбарыҫ]





**167.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙең өн моделен эшлә. Уны транскрипцияла, аҙаҡтан хәрефтәр менән яҙып ҡуй.

**168.** 

**Юртаҡ.**

Юрғалай юлда юртаҡ.
Бөтәһенә — юл уртаҡ.
Күгәүен арттан ҡалмай,
Юрғаға етә алмай.

**169.** Һөйләм төҙөп яҙ.

1. [Йулай] [йаҡшы] уҡый.

2. 

һатып алдым.

3. Зебра тиреһе [йулаҡ].
4. [йуха] төлкө йәшенде.
5.  Африкала йәшәй.

**170.** Тексты уҡы. Күсереп яҙ. Орфограмманы һыҙ.

## Юлсы.

Юлсы сәфәргә алдан әҙерләнә. Кәрәк әйберҙәрен төйнәп ҡуя. Иртәрәк ятып ял итә. Юлға юлсы иртә юллана.

## Е хәрефе.

**171.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙең өн моделен төҙө. Уны транскрипцияла, аҙаҡтан хәрефтәр менән яҙ.








**172.** Мәҡәлдең тейешле өлөшөн табып, берләштереп яҙ. Орфограммаларҙы һыҙ.

| | |
|---|---|
| Болот елгә | екән — күлендә. |
| Туйынған да — ер, | ир тыуған илендә. |
| Ерле —ерендә, | ҡаршы йөрөмәй. |
| Ат туйған ерендә, | һыйынған да — ер. |

**173.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп дәфтәреңә яҙып ҡуй.

[йэмэш], [йэгэт], [йэңэү], [йэпшэк], [йэҫ], [йэтди], [йэрэн], [йэтэш], [йэтэм], [йэтэксэ], [йэбэк]

**174.**

## Сәтләүек.



Сәтләүек ҡыуағындағы
Емешкә күҙ һалғас та:
— Ерҙәге еләктәр бешкән,
Бешмәгән, — ти, —
ағаста.
Ҡояшҡа ла яҡшыраҡ —
Бейектә бит был емеш.
Ашап ҡарап булмай инде
Уны бешмәгән килеш.



(Әлфиә Әсәҙуллина.)

Шиғыр йөкмәткеһе һәм һүрәттәр буйынса хикәйә төҙө.

**175.** Һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙ.

1.  күл буйында үҫә. 2. Әсәйем  ҡаҡ ҡойҙо. 3. Олатайыма **70** йәш тулды.

4.  кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

## Я хәрефе.

**176.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙең өн моделен эшлә. Һүҙҙе транскрипцияла, унан хәрефтәр менән яҙып ҡуй.







**177.** Ижектәрҙе берләштереп, һүҙ төҙөп яҙ.




**178.** 

1. Яйыҡ буйлап ямғыр яуа.
2. Ярҙамсыл Яхъя ярҙамға килә.
3. Шаян Раян шаяра.
4. Яңы сынаяҡ ялтырай.
5. Ҡуян ялан буйлап елә.
6. Яңы ҡар ҡояшта ялтырап ята.

**179. Я** хәрефе булған һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Уларҙың өн моделен эшлә, транскрипциялап яҙ.

### Ямғыр.



Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа,
Беҙ өйҙә ултырабыҙ.
Ямғыр яуып туҡтағанды
Көтөп кенә торабыҙ.

Ямғыр тымғас та урамға
Йүгерешеп сығабыҙ.
«Ҡояш, сыҡ-сыҡ тиҙерәк!» — тип
Шатланып ҡысҡырабыҙ.

(М. Бикбаева.)

**180.** Һөйләмдәр төҙөп, дөрөҫ итеп күсереп яҙ.

1. [йамал]  [йарҙы].

2. Ағастар  [йарҙы].

3. Сәлим өләсәһенә [йауап] хаты [йаҙа].

4.  [айауһыҙ] ҡыҙҙыра.

5. Әбей ҡапсыҡҡа  һала.

**181.** Һүҙҙең икенсе яртыһын тап.

| | |
|---|---|
| бу | лыҡ |
| яу | ҡуп |
| Я | яр |
| яҡ | яу |
| ҡы | таш |

| | |
|---|---|
| ма | ян |
| ҡо | сыҡ |
| ша | тыҡ |
| яҫ | яҡ |
| яр | яш |

## Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр.

**182.** Һөттән әҙерләнгән ашамлыҡтарҙың атамаларын теҙеп яҙ.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | | й | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | р | | | | | к |

| | | |
|---|---|---|
| | | й |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ҡ | | | ы | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | о | | о | |

**183.** Артыҡ һүҙҙе билдәлә. Ни өсөн артыҡ? Аңлат. Үҙеңә оҡшаған 3-4 һүҙ менән һөйләм төҙөп яҙ.

1) көн, төн, ҡыш, ҡар, уйынсыҡ, ел
2) шар, туп, алма, ҡояш, китап
3) бейәләй, һарыҡ, тун, итек, күлдәк
5) йондоҙ, ай, ҡояш, итек, ер

**184.**

**Ҡыш булғас.**

Ҡар яуғас,
Ҡыш булғас,
Бар ағас
Яланғас.

(Алексей Плещеев.)

**Яҙ булғас.**

Йәшәрә үлән,
Йылмая ҡояш.
Тыуған яғына
Ҡайтты ҡарлуғас.

(Рәми Ғарипов.)

**185.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙгә тейешле өн моделен тап. Һүҙҙе хәрефтәр менән дәфтәреңә яҙ.








**186.**

1. Себештәр тары ашай. 2. Айыу бал ярата. 3. Ҡарбуз ҡыҙарып еште. 4. Сәлим утын яра. 5. Ҡаҙҙар һыу буйына төштө.

**187.** Әкиәт өҙөгөн уҡы. Текст нимәләрҙән тора? Уның йөкмәткеһен аңларға нимә ярҙам итте: өнмө, һүҙме, һөйләмме? Ни өсөн?

## Юлбарыҫ менән төлкө.



Төлкө урманға барып ингән. Ҡараһа, ҡаршыһына юлбарыҫ килә икән. Төлкө ҡаса башлай. Юлбарыҫ уның артынан төшә. Бына-бына, тота яҙып, баҫтырып етеп килә, ти.

Уларҙың юлын тәрән йырын бүлә. Төлкө туҡтай ҙа сеңләп илай башлай. Юлбарыҫ аптырап, туҡтап ҡала.

— Ниңә илайһың, төлкө?

— Эй, һеҙҙе күрҙем дә атайығыҙҙы иҫкә төшөрҙөм. Ул бик йылғыр ине!

Донъяһын онота юлбарыҫ. Йылғырлығын күрһәтеп, маҡтанғыһы килә. Йырын аша һикерә. Тик икенсе ярға етә алмай. Аҫҡа ҡолап төшә.

- Текстан предметтың атамаһын аңлатҡан 6-7 һүҙ күсереп яҙ.

**188.** Йомаҡтарҙың яуаптарын тапһаң, кроссвордты сисерһең.




1. Энәле йомғаҡ.
2. Күктән килде, ергә китте.
3. Яҙ килһә, кейенә, көҙ килһә, сисенә.
4. Ике үркәсле була, һыуһыҙ ҙа йәшәй ала.
5. Елбикә алып килгәнде
   Ербикә ҡабул иткән.
6. Осо нәҙек, төбө йыуан, ярата уны ҡуян.
7. Дүрт кешегә бер эшләпә.

# Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.

**189.** Һөйләмде, предметтың һәм хәрәкәттең билдәһен белдергән һүҙ өҫтәп, күсереп яҙ.

1. ____ ____ әсәһен бик һағынды.
2. Баҡсасы ____ сәскәләр үҫтерә.
3. ____ күктә ____ болоттар йөҙә.
4. Бал ҡорттары ____ безелдәштеләр.
5. ____ балалар Әминә инәйҙең утынын ярҙылар.

**190.** Шиғырҙы уҡы. Предметтың атамаһын һәм уның билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе парлап яҙып ал.

**Болон.**



Йәшел хәтфә кеүек матур
болон
Нурҙар сәсеп ята донъяға,
Һығылып үҫкән талдар
араһынан
Көмөш таҫма кеүек һыу аға.
Леп-леп итеп оса күбәләктәр,
Сутылдашып һайрай ҡоштары.
Ал, ҡыҙыл, аҡ, һары сәскә менән
Биҙәкләнгән үлән баштары.

(Мәжит Ғафури.)

**191.** Предметтың ярашлы билдәләрен табып, уларҙы парлап яҙ.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| һутлы | әсе | уҫал | ҡуйы | уңған |
| эт | алма | һуған | ҡыҙ | ҡаймаҡ |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| йәмле | йомшаҡ | сәскәле | яғымлы | яңғыҙ |
| шәл | болон | йәй | ҡайын | һүҙ |

**192.**

### Илкәйем.

Бер генә ҡарайым үҙем,
Бер зәңгәр күктә күҙем,
Һин генәһең, бер генәһең,
Ғәзиз илкәйем минең.

Туҡ башаҡтарҙы иркәләп,
Киң баҫыуҙа уйнай ел.
Күҙ күреме етмәй күреп,
Ниндәй киң һин, Тыуған ил.

(Яҡуп Ҡолмой.)

**193.** Түбәндәге һүҙҙәр ниндәй йыл миҙгеле тураһында һөйләй? Улар менән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ.

буранлы, ҡарлы, һыуыҡ, саф, һалҡын, эҫе, томра, йәмле, йәшел, йылы, сәскәле,

һыулы, ҡояшлы, еүеш, тамсылы, шаулы, һары, моңһоу, ямғырлы, йонсоу, алтын

**194.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең ниндәй һүрәтте асыҡлағанын әйт. Шулар менән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ.







Белешмә өсөн һүҙҙәр: яғымлы, әсе, сая, көслө, киң, осло, һөйкөмлө, матур, эшсән, файҙалы, йомро, үткер, нескә, аҡ.

**195.** Өҙөктө уҡы. Предметтың атамаһын һәм уның билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.

**Урман ситендә.**

Балалар урман ситенә килеп еттеләр. Ә унда бәшмәктәрҙең күплеге! Ҡойолған ҡарағай энәләре аҫтында майлы бәшмәктәр ялтырай. Сағыу биҙәктәре менән ҡыҙыл бәшмәктәр үҙенә йәлеп итә. Йыраҡта, үләндәр араһында, һары бәшмәктәр күренә.

(Р. Сәйетборханова.)

# Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр.

**196.** Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәрҙе иғтибар менән уҡы. Ниндәй предмет тураһында һүҙ барғанын асыҡла.

1) яба, һыҙғыра, өрә, иҫә, уйнай

2) уйлана, ҡайғырта, борсола, ярата, иркәләй

3) аға, сылтырай, ялтырай

4) кешнәй, саба, уйнаҡлай, үрәпсей

**197.** Һүрәттәр буйынса кроссвордты сис.




- Һүрәттә төшөрөлгән һәр предметтың ниндәй эш-хәрәкәт башҡарғанын билдәлә. Уларҙы парлап яҙ.

Өлгө: хат килә

**198.** Әкиәттең башын уҡы. Дауам ит.





Урманда ҡуян менән төлкө йәшәгән, ти. Бик дуҫ булғандар улар. Һәр береһе үҙ ҡойроғон яратҡан. Төлкөнөң ҡойроғо ерән. Ул ем-ем итеп, ялтырап торған. Ҡуяндың ҡойроғо мамыҡ кеүек йомшаҡ, һөт кеүек аҡ булған...

**199.** Предметты һәм уның эш-хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙе парлап яҙ.















Белешмә өсөн һүҙҙәр: сәнсә, тегә; тота, ҡаса; һуҙыла, төшә; йөҙә, ҡағына; яна, дөрләй; туҡылдай, сүпләй; түҙә, бышҡыра.

**200.** Һөйләмгә тейешле һүҙҙе ҡуйып күсереп яҙ.

## Пар сыйырсыҡ.

Илнур сыйырсыҡ ояһы ______ . Уны ҡайын ағасына ______ . Малай ҡошсоҡтарҙың килеүен ______ . Улар оҙаҡ көттөрмәне. Иртәнсәк пар сыйырсыҡтар оя башында ине.

**201.** Өҙөктө уҡы. Һүрәтте иғтибар менән өйрән. Һәр кейеккә хас сифатты, ул башҡарған эште (хәрәкәтте) ата. Хәрәкәтте белдергән һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.



## Ҡайын һағыҙы.

Айыу малайы урманда сауҙа асып ебәргән. Хас та ҡалалағы кеүек. Төҫлө ҡағыҙға төрөлгән һағыҙҙар, шоколадтар бар. Бер ҡуян кишер һатып алды. Сиратта бүре, төлкө балалары тора. Бурһыҡ ҡыҙыҡайы

киптерелгән ҡурай еләге һорай. Ә терпе балаһы Энәлекәй ҡайын һағыҙы алырға килгән.

(Салауат Кәрим буйынса.)

● Һатыусы айыу ни эшләй? Бүре, төлкө, бурһыҡ, терпе балалары? Һин уларҙы ниндәй итеп күҙ алдына килтерәһең? «Белешмә өсөн һүҙҙәр»ҙе ҡуллан.

**Белешмә өсөн һүҙҙәр:** һата, белеште, ҡыҙыҡһынды, күҙе төштө, ҡыуанды, ҡәнәғәт, оялсан, ҡыйыуһыҙ, зирәк, үткен, түҙемле, яғымлы, йомшаҡ, иғтибарлы, шат.

## Ярҙамсы һүҙҙәр: һәм, менән.




**202.**

1. Ғайса менән Ғәлим — дуҫтар. 2. Һоросай менән Аҡбай бик татыуҙар. 3. Өләсәйем таң менән тора. 4. Таһир менән Зәбир ярышҡа китте. 5. Йәй һәм ҡыш — мин яратҡан йыл миҙгелдәре.

**203.** Һүрәттәрҙе ҡулланып, һүҙбәйләнештәр төҙө. Улар менән 2-3 һөйләм төҙөп яҙ.







**204.**

## Тәүге ямғыр.

Күк йөҙө болоттар менән ҡапланды. Көн ҡараңғыланды. Яйлап ямғыр күҙе төшә башланы. Тора-бара ул көсәйҙе. Тәүге яҙғы ямғыр яуып үтте. Бөтә тирә-йүн таҙарҙы.

**205.** Партала бергә ултырған класташтарыңдың исемдәрен парлап теҙеп яҙ.

Өлгө: Сәриә **менән** Азамат
йәки
Сәриә **һәм** Азамат

## Ярҙамсы һүҙҙәр: да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә.

**206.** Һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ. Уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлат.

1) Ямғыр туҡтамай яуҙы ла яуҙы. 2) Бейә ҡымыҙы тәмле лә, файҙалы ла. 3) Гөлбикә йүгерә лә йүгерә. Йомғаҡ тәгәрәй ҙә тәгәрәй. 4) Заһит та, Дамир ҙа, Кәрим дә 1-се класта уҡыйҙар.




**Да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә ярҙамсы һүҙҙәре айырым яҙыла.**

**207.** Һөйләмдәр төҙөп яҙ.

1.  △,  △ һүрәтте матур төшөрәләр.

2.  △,  △ — йорт хайуандары.

3.  △,  △ — ауылдың хөрмәтле кешеләре.

4.  △,  △ — емештәр.

**208.** Тексты уҡы. Уны һөйләргә өйрән. Унан ярҙамсы һүҙле һөйләмдәрҙе күсереп яҙып ал.

## Сыйырсыҡ балаһы.

Ҡошсоҡ ояһынан йығылып төштө. Әлфиә ҡошсоҡто услап, өйгә йүгерҙе.

Ҡыҙ уға ярма һалды, һыу ҡуйҙы. Ҡош муйынын бер яҡҡа ҡыйыш һалып, ултыра бирҙе. Ул ярма ла суҡыманы, һыу ҙа эсмәне. Әллә ауырыймы икән? Әлфиә уға дарыу ҙа ҡаптырырға маташты. Ҡошсоҡ уны ла ҡапманы. Бәләкәстәр дарыу эсергә яратмай шул.

(Мостай Кәрим.)

**209.**

### Муса.

Йәшәгән, ти, бәләкәй генә Муса. Ул атаһы, әсәһе менән генә йәшәгән. Уларҙың йорто ҡала ситендә генә торған. Яҡында ғына урман булған. Ә юл аръяғында йылға ағып ятҡан.

(Р. Сәйетборханова.)

**Мәҡәлдәр.**

Хаҡ эште халыҡ һөйөр.

Һөнәре бар юғалмаҫ.

## Ярҙамсы һүҙҙәр: ғына — генә, ҡына — кенә.

**210.** Һүрәтте ҡулланып, һөйләм төҙөп яҙ.









**211.** Һөйләмгә тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

1. Балан әсе, ә ер еләге [〜]—△.

2. Минең әсәйем [〜]—△.

3. [—] ауылы тау битендә △ урынлашҡан.

4. Алыҫтан [〜]—△ моң ағыла.

△ → ғына — генә
△ → ҡына — кенә

**Ғына — генә, ҡына — кенә** ярҙамсы һүҙҙәре айырым яҙыла.

**212.** Бирелгән һүҙҙәрҙе тейешле ярҙамсы һүҙ менән бәйләп яҙ. Улар менән телдән һөйләмдәр төҙө.

| | | | |
|---|---|---|---|
| көсһөҙ | ҡына | бирәү | кенә |
| балалар | кенә | ауылда | генә |
| йомшаҡ | ғына | тирәк | ҡына |
| һирәк | генә | һаҡ | ғына |

**213.** Күсереп яҙ. Һөйләмгә тейешле ярҙамсы һүҙҙе ҡушып яҙ.

1. Кисә сәғәт өстә △ башлана. 2. Айҙарҙың иншаһы матур △ . 3. Бесәнлеккә төшкә △ барып еттек. 4. Көньяҡтан йылы △ ел иҫә. 5. Тау бите һөҙәк △ .

## Йөкмәткеһе

Алфавит . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Өн-хәреф . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Уларҙы тамғалау . 13
Һүҙҙе ижеккә бүлеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23
Һүҙҙе юлдан юлға күсереү . . . . . . . . . . . . . . . 30
Баш хәреф . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35
а) Кешенең исем-фамилиялары яҙылышы . . . . . 35
б) Хайуан ҡушаматтары . . . . . . . . . . . . . . . . . 37
в) Ер-һыу атамалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
Һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
а) Хәбәр һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
б) Һорау һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 52
в) Өндәү һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
**О-ө** хәрефле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 62
**Ү-у** хәрефле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 65
**Э (е)** хәрефле һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
**Й** хәрефе ҡайҙа һәм ҡасан яҙыла? . . . . . . . . . . . . . 71
Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **е, ё, ю, я** хәреф-тамғалары 73
**Ю** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 76
**Е** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 78
**Я** хәрефе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80
Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр . . . . . . . . 83
Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр . . . . . . . . 87
Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр . . . 90
Ярҙамсы һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 94

Учебное издание

**СЫНБУЛАТОВА Фания Шугаиповна**

**РОДНОЙ ЯЗЫК**

**вариативный учебник
для 1 класса башкирской школы**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Сәйҙә Рәхимова*
Мөхәррире *Сәлимә Аҡъюлова*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректоры *Гөлсирә Таһирова*

Йыйырға бирелде 19.11.07. Баҫырға ҡул ҡуйылды 18.01.08. Форматы $70 \times 90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 7,60 + 0,29 форзацы. Шартлы буяу отт. 32,17. Иҫәп-нәшер таб. 3,84 + 0,525 форзацы. Тиражы 11 000 дана. Заказ № 1.0163.07.

Башҡортостан Республикаһының «Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

# Орфогр



Кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме баш хәрефтән яҙыла:

**Түләбаев Ғәлинур Илдар улы.**

Хайуан ҡушаматтары баш хәрефтән яҙыла:

**Саптар, Йондоҙ**



Ике өндө белдергән хәрефтәр:
**я, е, ё, ю.**



**Еләк**



**Юл**



**Япраҡ**



**Ёлка**

# аммалар

Ярҙамсы һүҙҙәр айырым яҙыла:
— **һәм, менән;**
— **ғына, генә; ҡына, кенә;**
— **ла-лә, да-дә, та-тә, ҙа-ҙә.**



а) **Әмир һәм Зилә**



б) **ҡыҙыл ғына мәк**





в) **Әлиә лә, Гөлсөм дә, Алһыу ҙа ...** .